ижад

БАШ ЭЙӘБЕҘ

Бөйөк Ватан һуғышында
“Енербеҙ!” – тип, ышанып,
Атайҙар бирҙеләр көсөн
Илдә тыныслык өсөн.
Фашист вәхширҙәрен кыуып,
Һеҙ яуҙан кайткас енеп,
75 йыл беҙ йәшәйбеҙ
Азат илдә гөрләшеп.
Иген-заводтарҙа карт-королар,
Бала-сағалар эшләгәндәр,
Һуғыш яланынан кайтканынан
Кайтмағаны бик күп булдылар.
Рәхмәт һеҙгә хеҙмәтегеҙ өсөн,
Алмаҫ-талмаҫ булған көсөгөҙ,
Күркәм булып
торһон түшегеҙҙә
Бөгөн куйған миҙалдарығыҙ.
Баш эйәбеҙ һеҙҙең алдығыҙҙа,
Онотмабыҙ һеҙҙе мәңгегә,
Тыныслыкта
һау булып йәшәгеҙ,
Бик аҙ калдығыҙ ҙа донъяла.

ӘСӘЙЕМ БЕҘГӘ ҮРНӘК

Ун ике йәштән
һуғыш йылдарында
Эшләгән ул иген-баксала,
Ас-яланғас, яланаяк кисеп,
Йөрөгән яҙғы боҙлауыктарҙа.
Серек бәрәңге һәм
башак йыйған,
Курмас курып,
тирмән дә тарткан,
Сөнки үҙҙәренең ғаиләһендә
Әсәйем өлкән бала булған.
Ә кистәрен лампа яктыһында
Бейәләй һәм ойок бәйләгән,
Арымайса, көнө-төнө эшләп,
Фронтка шулай ярҙам ебәргән.
Һуғыш бөткәс Әсән юлдарына,
Үгеҙ егеп, таш ташыған ул,
Инде үгеҙ касып сығып китһә,
Ултырып йылай
юлдың ситендә.
Таңдан төнгә
тиклем малсылыкта
Һыйыр һауҙы, быҙау караны,
Ауырлыктарҙан ул бөгөлмәне,
Ғаилә усағын һүндермәне.
87 йәшкә тиклем йәшәп,
Гүр эйәһе булды әсәйем,
Беҙгә ул теләне изге теләк,
Әсәй булды беҙгә ҙур үрнәк.

Әльфинә ЗАЙЦЕВА.

Халык-ара туған телдәр көнө

Шағирә исемендә китапхана

21 февралдә, Халык-ара туған телдәр көнөндә, Колой ауыл китапханаһында бик иҫтәлекле сара – шағирә Кәтибә Кинйәбулатова рухына бағышланған әҙәби кисә уҙғарылды.

Кәтибә Кәрим кыҙы Кинйәбулатова тыуыуына быйыл теүәл 100 йыл тула. Ошо уңай менән Силәбе өлкәһенең башкорт теле һәм әҙәбиәте укытыусылар ассоциацияһы шағирә иҫтәлегенә арналған сараларҙың маршрутын төҙөгәйне. 17 ғинуарҙа уның тыуған ауылы – Мәүлит китапханаһында хәтер кисәһе уҙҙы, 24 ғинуарҙа Арғаяштың икенсе мәктәбендә йәш әкиәт һөйләүселәр конкурсы шағирә рухына бағышланды. Колой ауыл китапхана хеҙмәткәрҙәре һәм мәктәп коллективы маршрутты тормошка ашырыуға егәрле эш күрһәттеләр.

Тыуған якты өйрәнеү – Колой ауыл китапхана эшенең уңышлы тармағы. Байтак эштәр башкарылған, шағирә тормошона арналған музей мөйөшө бар. Унда шағирәнең баҫыу машинкаһы, башка әһәмиәтле экспонаттар

һаҡлана. Был юлы йәнә эшлекле аҙым яһалды – депутаттар советы 27 ғинуарҙа ҡабул иткән карар нигеҙендә китапханаға Кәтибә Кинйәбулатова исеме бирелде. Был турала Колой ауыл депутаттар советы рәйесе Людмила Мусина сығыш яһыны.

Иҫтәлекле сарала шағирәнең туғандары – Рәйхана һәм Тәнзилә Салауат кыҙҙары, шағирәнең лайыклы укыусыһы – Арғаяш районының почетлы гражданины, 90 йәшлек Зәйтүнә Хәйруллина, район һәм ауыл хакимиәт вәкилдәре, укытыусылар һәм китапханасылар катнашты. Айбат, Биккол, Березовка, Яраткол, Куянбай, Куйһары, Кәҙер һ.б. ауылдарҙан килгәйнеләр. “Һоклandырғыс кеше”, “аҫыл шағирә”, “Урал каялары шикелле сая зат”, “арҙаклы шәхес”, “милләт әсәһе” – шулай кылыкһырланы яҡташтары. Кисәлә йөрәктең иң нескә кылдарына сиртеп ебәрер шиғырҙар яңғыраны. Флюра Истамғолова менән Колой урта мәктәбенең башланғыс кластар укытыусыһы Лилиә Ишбирҙина сараны матур итеп алып барҙылар.

Әлеге вакытта Силәбелә Шәйехзада Бабич, Коншак районында Кадир Даян һәм Мөхәмәтйәров Хәй исемдәрен йөрөткән китапханалар бар. Шағирәнең яҡты исемен яҡташтары тыуған иленда ошолай мәңгеләштерҙе. Колой ауыл китапхана мөдире Альмира Мөхәмәҙиева сығыш яһаны, ул үткәндәрҙе барлап киләсәктә тағы лайыклы эштәр башкарасағын белдерҙе.

Камса МОРТАЗИН,
Акмулла исемендәге әҙәби берекмә етәксеһе.
Фото авторы
Гөлзана ТОЙҒОНОВА.

иҫтәлектәр

Әсә – милләт тоткаһы

1946 йыл. Һуғыш емеректәрен төҙәткән ауыр заман. Колой ете йыллык мәктәбенә беренсе синыфҡа укырға барғанда, мине башлап сәстәре икенән үреүле, мөләйем йөҙлө Кәтибә апай каршы алғайны.

Мин, сая холокло кыҙ, уның кулында тәрбиәләндем. Кәтибә Кәрим кыҙы бишенселә синыф етәксебеҙ булып, башкорт телен укыта башланы. Ул беҙҙе юғары максат куйып йәшәргә, тырыш һәм сабыр булырға өйрәтте.

Сентябрь. Тәүге немец теле дәресе бара. Укытыусы нимәләр аңлата. Ләкин күңелдәрҙә уңалмаған һуғыш яралары үҙенекен итә, беҙ немец телен өйрәнеүҙән класс менән баш тартабыҙ. Ә ни бары бер йыл уҙғас, алтынсы синыфта, Кәтибә апайҙың кәңәше менән француз телен өйрәнә башлайбыҙ.

Кәтибә апай бала күңелен аңлай, әсәй, өләсәйҙәр аша эш итә. Бик дәртле кеше, мандолинала оҫта уйнай, матур итеп йырлай. Ул дуҫлыкты яклап: “Һеҙ мәктәптә үҙ-ара туған булып китәһегеҙ, бер-берегеҙгә асыуланып, төҫ боҙоп йөрөмәгеҙ”, – тип кат-кат иҫкәртә торғайны.

Яҙ. Кар ирей. Бар тирә-яҡты һыу баҫа. Бер вакыт минең менән ултырған малай укырға йөрөмәй, юк та юк. Шунда мине Кәтибә апай хәл белергә ебәрә. Барһам, Закирҙың инәһе: “И-и, балам укырға барыр ине, быймаһы төпһөҙ, аяғына кейере юк”, – тип өҙгөләнә.

Мин был хәлде апайға алып барып еткерәм. Закир, иртәһенә тишек буймаһын кейеп, мәктәпкә килә. Бына шунда Кәтибә апай аптырамай, әмәлен таба. Ул институтта укыған сакта алған күпшы туфлийын балаға бүләк итә. Беҙ был хәлгә сикһеҙ шатланып туфлиҙы болашмак кейеп карайбыҙ. Мин шунда: “Их, минең дә ошондай туфлийым булһаҫы”, – тип эстән һыҙғайным.

– Балакайҙар, тыңлауһыҙ, үҙһүҙле һәм тәкәббер була күрмәгеҙ, – ти Кәтибә апай бер йәмһеҙ хәлдән һуң. – Һеҙ – буласаҡ еңгәләр, әсәләр, өләсәйҙәр. Әсә – ул милләт тоткаһы, һеҙ батыр улдар, тыйнаҡ һәм йыйнаҡ кыҙҙар тәрбиәләргә бурыслыһығыҙ. Ә тәртипһеҙлек менән бер кайҙа ла һыймаҫһығыҙ, бер-берегеҙҙе ғәфү итергә өйрәнегеҙ, – тип әйткән һүҙҙәре хәтеремдә мәңгегә уйылып калды.

Рәшиҙә КУЧУКОВА, Колой ауылы.

оҫталык дәрестәре

Милли кейемдәр кейегеҙ!

Арғаяш мәҙәни йортонда милли кейем буйынса оҫталык дәресе ойошторолдо.

Унда барыһы 20 кул оҫтаһы ҡатнашты. Румиә Ырыҫхужина менән Илвена Мөхәмәтйәнова башкорт катын-кыҙҙарының милли костюмы буйынса дәрес бирҙе. Был юлы катын-кыҙҙар бергәләп төшелдерек тегергә өйрәнделәр.

Румиә Ырыҫхужина тәүҙә төшелдеректе әҙерләү технологияһы тураһында һөйләне. Уның сере үтә ябай түгел. Тукыма һайлап алып, уны тәңкәләр, аҫылташтар, бисер йәки матур төймәләр менән биҙәйһең.

Оҫталар максатка иреште, ә унда ҡатнашыусылар кәнәғәт ҡалдылар. Мәҙәниәт йортонда ошондай оҫталык дәрестәрен артабан да даими уҙғарыу тураһында килешелде.

Милә СОЛТАНОВА.

театр афишаһы

Тиҙҙән гастролдәр

Арғаяштa Сибай драма театрының “Тере тупрак” тигән спектакле зур уңыш менән уҙҙы.

Спектаклде арғаяштар яратып ҡабул итте. “Спектакль беҙгә бик окшаны. Ул бик кыҙык та, кыҙғаныс та, илап та, көлөп тә алдык...”, – ти тамашасы.

Март айында Силәбелә театр вакифаһы көтөлә. Мәжит Ғафури исемендәге Башкорт дәүләт драма театры гастролгә килә. Быйыл театр 100 йыллык тарихын билдәләй.

Танылған театр Арғаяш мәҙәниәт йортонда сығыш яһаясаҡ. Флорид Бүләков әҫәре буйынса куйылған “Һөйәһеңме, һөймәйһеңме” тигән спектакль күрһәтә. Режиссеры – Илсур Каҙакбаев. Төп ролдәрҙә – Рәсәйҙең атҡаҙанған һәм Башкортостандың халық артисы Олег Ханов, Башкортостандың халық артисткаһы Тәнзилә Хисамова.

...Фүмерҙәр ахыры. Абдулла менән Фатима яҙмыштары. Ғаилә усағының йылыһы, бер-береңә тоғролоҡ һәм бик-бик һуңлап килгән ихлас һөйөү – әйтеп өлгөрөп буламы, юкмы?

26 мартта Башкорт дәүләт драма театры спектакленә рәхим итегеҙ!
Спектакль Арғаяш мәҙәниәт йортонда 18.00 сәғәттә башлана.